Ун өсөнсө март, йома.

# Диктант

# «Эсер һыу хаҡында хәстәрлек».

Балыҡ тотоусолар өсөн күлдәр – сикһеҙ байлыҡ. Тик шул байлыҡ юҡҡа сыҡмаһын, күлдәр һәр саҡ таҙа булһын өсөн, даими хәстәрлек күрергә кәрәк. Мәҫәлән, бер ваҡыт Ҡандракүлдең балығы бөтә башлағайны. Ләкин урындағы йәмәғәтселек, Башҡортостан балыҡ комбинаты эшселәре һәм инженерҙарының тырышлығы менән Ҡандраның балыҡ запасы тулыландырылды.

Эсер һыу хаҡында хәстәрлек күргәндә генә ул саф, таҙа көйөнсә кешеләргә меңәр йылдар буйы хеҙмәт итә ала. Һыуҙарҙың таҙалығы өсөн көрәш бер ҙә туктамаҫҡа тейеш. (6 кл)

# «Сәскә – тормош йәме».

Ергә яҙ килде. Ҡар ирей, гөрләүектәр аға, йылғалар таша, боҙҙар китә. Беҙ яҙ матурлығын йәшеллектә, ҡоштар моңонда, сәскәләрҙә күрәбеҙ. Иң беренсе булып үгәй инә үләне сәскәләнә. Унан умырзая беҙҙе ҡыуандыра.

Яҙҙың тәүге сәскәләре бик күп: баллыҡай, күк умырзая, кәкүк емеше, кәзә һаҡалы, сибәркәй, ҡарлуғас үләне, ҡаҙ йыуаһы, һары умырзая. Был сәскәләр йылдан-йыл аҙая бара. Сәскә атҡанда кешеләр уларҙы самаһыҙ күпләп йыя, тәбиғәттең йәмен ебәрә.

Сәскә – тормош йәме. Бөтәбеҙ ҙә уға ҡарап һоҡланайыҡ, һаҡлайыҡ. (7 кл)

# Яҙ килә.

Яҙ килеүен иң тәүҙә  ҡоштар һиҙенә. Сәүкәләр, турғайҙар оя эҙләп оса, йылы яҡтан ҡарғалар ҡайта. Ә ҡыҙылтүш турғайҙар, киреһенсә, төньяҡҡа, һалҡын тайга урмандарына күсә.

Марттың икенсе яртыһында ағас ботаҡтарында бөрө тулыша башлай.

Йылға, күлдәрҙә балыҡтар уяна. Урмандағы йәнлектәр тиреләрен алмаштыра. Был осорҙа һунар итергә ярамай.

Март аҙағында ҡаңғылдашып ҡыр ҡаҙҙары ҡайтып төшә.

Был айҙы бөтә тереклек ауыр кисерә. Йәнлектәр, ҡоштар асыға. Шуға күрә ҡанатлы дуҫтарға оялар яһарға, тағараҡтар элергә, ем һибергә кәрәк. (73 һүҙ).

# «Ниндәй ул башҡорт аты?»

Башҡорт аты тураһында дан күптән билдәле. 1725-1756 йылдарҙа баш күтәргән башҡорттарға ҡаршы көрәшеүсе генерал Румянцев: «…Уларҙың артынан ҡыуыу елде ҡыуыу менән бер, беҙҙең аттарға уларҙың аттарына етеү ҡайҙа ул!» - тип яҙған.

Икенсе бер батша генералы Черновтың яҙмалары ла шуны ҡеүәтләй: «Башҡорттар йыш ҡына биләмәләре аша үткән түрәләрҙе оҙатып, ялһыҙ 6-7 сәғәт буйына 3-4 ҡыуғын ер эйәреп бара ине. Ә юлда осраған ҡаршылыҡтарҙы бар тип тә белмәйҙәр: йылғаларҙы ат өҫтөндә йөҙөп сығалар, ҡуйы урман араһына барып ингәндә, башҡорт аты ағастар араһынан етеҙ йөрөй, текә тауға еңел менә һәм төшә. Башҡорттоң аты бөтә талаптарға яуап бирә: еңел, сыҙам, арзан, ҡурҡыу белмәй. (106 һүҙ).

# «Бесәйем».

Минең бәләкәй генә бесәйем бар. Ул ап-аҡ, ялбыр йөнлө. Маңлайында ҡара таптары бар. Мин уны Ҡараҡаш тип атаным. Бесәйемдең түңәрәк  күҙҙәре ут кеүек янып тора. Ул һөт ярата. Эсеп туйғас, йөнтәҫ тәпәйҙәре менән битен йыуа. Һуңынан йомшаҡ ҡойроғо менән уйнай башлай. (42 һүҙ).